*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Башҡорт балы

## Һутта — Илаһ ҡөҙрәте

Уй-хыялдарың менән ғаләмдәргә ашһаң, йыһандарҙа йөҙһәң дә, иң хозуры, хайран иткәне, арбағаны — ғәзиз ер! Тәбиғәт тылсымы ғәжәп: ниндәй генә үҫемлектәр үҫмәй, гөл-сәскәләр балҡымай, емеш-еләк өлгөрмәй?.. Еркәйебеҙ — йәннәт, үҙе бер мөғжизә! Кешенең йәме, йәне, сәләмәтлеге, оҙон ғүмере өсөн унда барыһы ла бар.

Күк һыуы менән ҡойонған, ысығынан сафланған, ҡояш нурҙарынан наҙланған сәскәләргә бал ҡорттары ҡуна, илаһи һут-шәрбәт һура һәм хуш-еҫ аңҡытып торған йорттарына ташый. Һутта иһә — Илаһ ҡөҙрәте, тәнде һәм йәнде һауыҡтырыу, йәшәртеү тылсымы. Бал ҡорттары бар ғилемде белеп тыуа, тиеүҙәре раҫтыр, күрәһең. Көнитмештәре — үрнәк, фәһем, ризыҡтары — им, шифа, асыл-булмыштары — сер-йомғаҡ... Шуғалырмы ҡойғандар байтаҡ йомаҡ:

Әлхиәләр, бәлхиәләр
Юғары менеп оялар.
Оялары — алтын селтәр,
Селтәрендә — тәмле шәкәр.

Бер ағайҙың баҡсаһы бар,
Баҡсаһында ҡыҙҙары бар.
Көнө буйы йөк ташыйҙар,
Һарысай аҙыҡ ашайҙар.

Шундай үткер күҙҙәре,
Селтәр бәйләй үҙҙәре,
Селтәрҙәре түңәрәк,
Эшләй улар үрмәләп.

Алтын келәт эсендә
Урал ҡыҙы быҙлай.
”Әллү!” — тейҙе беләккә,
Әле булһа һыҙлай.

Оҙаҡ йылдар ҡортсолоҡ менән шөғөлләнеүселәр, бал ҡорттарының ҡылыҡ-ғәҙәттәрен күҙәтеүселәр уларҙың хәрәкәттәр, өндәр, еҫтәр яр-

ҙамында аңлашыуын яҡшы белә. Эҙәрмән ҡорттар ҡайҙа һут, һитә барлығын байҡау өсөн сәфәр ҡыла. Хөр урынды тапҡас, был хаҡта улар бик ентекләп эшсе ҡорттарға аңлата: ҡайһы тарафта, ниндәй алыҫлыҡта икәнен, ризыҡтың күпмелеген... Мәғлүмәт ғәмәлдә бейеү аша еткерелә. Эҙәрмән бал ҡорто кәрәҙ буйлап, йә һул, йә уң яҡҡа йүгереп, боролоп, түңәрәк яһап бейей. Был ҡыуаныслы хәбәр килтергән бал ҡорто бейеүе була ла инде.

Был күренештең асылы тәбиғәткә, үҫемлектәр донъяһына һәм йәшәүҙе дауам итеүгә ҡөҙрәт биргән ризыҡ табыуға бәйле. Балдың тылсымы — үҫемлектәрҙең күҙәнәктәренән сыҡҡан, һабаҡтарынан, япраҡтарынан йөрөгән, сәскәләр үрсеү өсөн бүлгән һут-шыйыҡсанан. Тап ошо илаһи һеркәләнеү мәлендә бал ҡорттары сәскәләрҙән һут йыя һәм уны эшкәртеп, йәғни биҙҙәрендәге ферменттар менән байытып, һыуын айырып, шифалы бал хасил итә.

## Ҡырағай бал ҡорто һәм солоҡ балы

Көньяҡ Урал төйәгендә, Башҡорт иленең тау-урмандарында ла донъяны йәнләндереп һәм йәмләндереп ҡырағай бал ҡорттары гөжләп, выжлап торған. Ағас ҡыуыштарына оялаған был ғәжәп бөжәктәрҙең балын татыу, артабан солоҡтар соҡоп, уларҙы бағыу, аҫрау боронғо башҡорттарҙың яраткан шөғөлө булған. Солоҡ хужалыҡтары барлыҡҡа килеп, һәр хужа солоҡ ағасына үҙ тамғаһын киртҡән. Оя бал ҡорттарына уңайлы шарттар тыуҙырып, йылыны һаҡларлыҡ итеп яһалған. Ояға һыуһар, айыу йоғонмаһын өсөн ауыҙ яғына туҡмаҡ эленгән. Бал ҡорттарына яҙғы байҡауҙа күстәр өҫтәлмә туҡландырылған, буш солоҡтар өсөн кәрәҙ алынған. Көҙгө байҡау мәлендә артыҡ бал йыйылған, оялар, күстәр ҡышлауға әҙерләнгән. Хәҙерге ваҡытта башҡорт бал ҡорто ағас ҡыуыштарында, солоҡтарҙа, түмәр умарталарҙа һәм таҡта умарталарҙа Бөрйән, Белорет, Ишембай, Йылайыр, Күгәрсен, Мәләүез төйәктәрендә һаҡланған һәм аҫрала.

Ҡырағай бал ҡорттары борон ағас ҡыуыштарында, тәбиғи ояла тиҫтә йылдар буйы йәшәгән, батман-батман булыр бал туплаған. Бындай табышҡа юлыҡҡан кеше үҙен бик бәхетле тойған. Бер риүәйәттә сағылыуынса, ҡара урманда ҡорт ҡунған урынды ҡарап йөрөүсе берәү ғәләмәт ҙур ағас ҡыуышын шәйләп, өҫкә үрмәләгән, ояның эсенә үк инеп киткән һәм биленән балға батҡан. Ҡуйырған балдан ысҡына алмай харап булам тигәндә, уны айыу ҡотҡарған.



Халҡыбыҙҙың ”Ҡуңыр буға” эпосының бер вариантында алып сыҡҡан аҙығы бөткән Таңдысаға ағас ҡыуышлығындағы бал йөрәгенә көс-ҡеүәт өҫтәгән ризыҡ була: ”Таңдыса тағы ла бик күп юл үтеп, тамам асыға башлай, зыулашып йөрөгән бал ҡорттарына осрай.

Күтәрелеп ағасҡа ҡараһа, тумыртҡа тишегенән ҡорттар осоп сығып йөрөй. Үрелеп ағасҡа менә башлай, бер ҡыуыраҡ ботаҡҡа тотонғанда, ботаҡ айырылып китә. Шул урындан юлаҡланып бал ағып төшә. Солоҡтоң эсе тулы күптәнге аҙау бал икән. Таңдыса туйғансы бал ашай".

Борон-борон, бик борон, бер әҙәм баҫмаҫ борон, Урал ере ожмахтай итеп тасуирланған "Күбәләк менән Тиләү" дастанында ла күңелгә хуш шундай юлдар бар:

...Бил быуырҙан булған, ти,
Ерҙең йәшел юрғаны.
Емештәре ер ябып,
Ҡыҙарып бешеп торғаны,
Бал ҡорттары кәрәҙгә
Бал тултырып торғаны...
Эштәр киткән яйланып,
Сәй ҙә, бал да майланып,
Бейә һауған күп итеп,
Ҡымыҙ эскән күпертеп,
Һаумал ҡуйған кикертеп.
Сатырҙан өйгә күскән —
Халыҡ бит ҡорттай эшсән.

Башҡорт иле, башҡорттар тураһында яҙған ҡайһы бер тикшеренеүселәр хатта *башкорт* атамаһын *баш корт* йәғни *баш кортсо* төшөнсәһе менән бәйләй һәм халыҡтың төп кәсеп-шөғөлөн сағылдыра тип фараз ҡыла. "Рәсәй дәүләтендә көн күргән бөтә халыҡтар һәм уларҙың көнкүреш йолалары, ғәҙәттәре, кейемдәре, торлаҡтары, дини инаныуҙары һәм башҡа ҡомартҡылары яҙмаһы"нда (1793 йыл) И.Г.Георги башҡорттар үҙҙәре төшөндөрөүенсә, *башкорт* атамаһы *корт караусы* тигәнде аңлатыуын яҙа. 1847 йылда "Ырымбур губернаһы ведомстәре"ндә "Башҡорттарҙың атамаһы тураһында" тигән мәҡәләһендә В.Юматов: "Башҡорттар үҙҙәрен *башкорт*, йәғни *корт караусы аҫабалар*, *бал корттары хужалары*, ти. Бәлки, был уларҙың хәҙерге Башҡортостан биләмәләренә күсеүенә бәйлелер", — тип яҙа.

Тарихсы Салауат Ғәлләмов "Урал батыр"ға дүрт мең йыл" тигән ғилми хеҙмәтендә билдәләп үтеүенсә, курдтар бал ҡортон *моҙ* тип атай. Баҡырҙың боронғо атамаһы иһә — *меҙ*. *Моҙ* ҙа, *меҙ* ҙә — һары төҫтә. Хәҙер башҡорттар ҡурғаш ҡушылған баҡырҙы — *еҙ*, курдтар менән ирандар — *меҙ*, ти. Боронғо *моҙ* һүҙе башҡор телендә *моҙға* рәүешендә һаҡланып ҡалған. Моҙға — айырған бал ҡорто күсен ябып тороу өсөн ҡабыҡтан эшләнгән һауыт.

Башҡорт халҡының арҙаҡлы улы, бөтә донъяға танылған шәрҡиәтсе Әхмәтзәки Вәлиди Туған йәш сағында солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ менән бик ихлас шөғөлләнгән. Был уның "Хәтирәләр" китабында сағылған: "Ауылыбыҙ умарта тотоу, бал йыйыу һәм "әсе бал" тип аталған эсемлекте эсеү менән тирә-йүнгә билдәле ине... Апрель аҙаҡтарында бал ҡорттары менән мәшғүл булдыҡ, йөҙҙән ашыу умартанан торған баҡсабыҙ ауылыбыҙҙан дүрт саҡырым алыҫлыҡта урынлашҡайны. Унда аласыҡ — йәйләү өйө һәм ҡышын умарталар һаҡлау өсөн ыҙма бар ине. Шулай уҡ бейек ағастарҙың өҫкө ботаҡтары араһында

урынлаштырылған, бал ҡорто күстәрен ҡундырыу өсөн ҡарағай ағастарына уйылып эшләгән солоҡтарыбыҙ ҙа булды. Улар йөҙ саҡырымға тиклем алыҫлыҡта төрлө ерҙә, төрлө тарафта урынлашҡайны. Апрелдә боронғо ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған был солоҡтарҙың, ҡырағай бал ҡорто ҡунһын өсөн, эсен таҙалап, балауыҙ һалыу эше башҡарыла. Быларҙы мин ҡустым Нурмөхәмәт һәм Ибраһим Ҡасҡынбай исемле дуҫым менән берлектә эшләй торғайным. Ибраһимдарҙың солоҡтары ла беҙҙеке кеүек күп ине...

Июндә, был ваҡыт умартасылыҡта биләм ҡарау тип аталған эш иң зауыҡлы һанала. Солоҡтарға ҡорт күстәренең осоп килеп урынлашыу-урынлашмауын йәиһә ҡырағай бал ҡорто күстәренең яңы айырылғандарының был ояларҙы ни дәрәжәлә ҡабул итеү-итмәүен ат өҫтөндә ултырған килеш күҙәтәһең. Беҙҙең милкебеҙ иҫәпләнгән солоҡ ағастары тауҙарҙа йәки үҙәндә булғанлыҡтан, көнөнә һыбай килеш иң күбе утыҙ-ҡырҡ саҡырым юл үтеп, ун-ун биш ояны ҡарап сығырға мөмкин. Йылына ни бары ун биш көн дауам иткән биләм ҡарауға мин дуҫым Ибраһим Ҡасҡынбай менән бергә сыға торғайным... Көҙ еткәс, умарталарҙы ҡышҡылыҡҡа ыҙмаларыбыҙға мин урынлаштырҙым. Бал ҡорттары мине һис саҡмаҫтар, уларға дуҫ икәнлегемде белерҙәр ине...

Ауылда күп итеп бал шарабы эшләнелә торғайны. Исламда рөхсәт ителгән был шарапты бәғзе башҡорт имамдары ла эсте. Беҙгә әҡрәбә тейеш бер имам ине, үрҙә уны Әһел мулла тип телгә алғайным. Ул халыҡтан ғөшөргә бал алып әсетеп эсә торғайны...

Мин көҙөн тауҙарҙағы солоҡ балдарын үҙ ҡулым менән йыйып, уларҙы һатып, бер аҙ аҡса тупламайынса, бал ҡорто ояларын ҡышлыҡ ыҙмаларға урынлаштырмайынса, тәүге ҡар яуғас, мылтыҡ һәм ыласын алып, урмандарға тауҙар араһына һыбай китеп, ҡор, ҡырғауыл һәм ҡуян һунарына сыҡмайынса, мәҙрәсәгә китмәй торғайным...

Үрек буйында ҡалдыҡ, бында ла солоҡтарыбыҙ бар ине. Уларҙың бер нисәһен үҙем уйғайным, бер нисәһе ағайым Вәли мулланан ҡалған. Шул йылда, ҙур бер ырыҫ кеүек, солоҡтарға ҡырағай ҡорт күстәре күп ҡунды. Илле солоҡтоң утыҙ бишенә ҡунғандыр. Быны иһә урындағы башҡорттар минең өсөн бер бәхет билгеһе булараҡ юраны. Мин дуҫтарымдың береһе менән тау һәм үҙәндәрҙә төрлө урындарҙа урынлашҡан солоҡтарҙан бал йыйҙым, сөнки атайым был солоҡтарҙан алған балдың бөтәһен дә һатып, үҙемә аҡса әҙерләргә рөхсәт иткәйне. Балды шул тирәгә килгән татар сауҙагәрҙәренә һаттым. Фәрәй мулланың ҡатыны, балдың ҡарараҡ төҫтәгеләрен айырып, шарап эшләне, дуҫтарым менән бында бер нисә көн күңел асҡандан һуң ауылға ҡайтып, Ҡазанға табан юлға сыҡтым...

Сентябрҙә ағас олондарындағы солоҡтарҙан бал йыйыу менән шөғөлләнеп, уларҙы баҙарҙа һатып, апаруҡ аҡса тупланым. Әйтеүемсә, атайым был бал аҡсаһын миңә бирҙе. Быйыл да солоҡтарға күп ҡорт ҡунды. Быны атайым: "Һин уҡыуыңды, һис шикһеҙ, уңышлы дауам итерһең, сөнки минең ғүмеремдә беҙҙең солоҡтарға был ҡәҙәр ҡорт ҡунғаны юҡ ине", — тип яҡшыға юраны. Мин Алағуян Тамағы ауылына килгәндә, беҙҙең ул тарафтағы солоҡтарыбыҙҙағы балды Ибраһим йыйып та ҡуйғайны. Минең тарихи китабым сығыуға иң ныҡ һөйөнгәне Иб-

раһим дуҫым булды”. Күрәһегеҙ, Әхмәтзәки Вәлиди Туған солоҡсолоҡ, умартасылыҡ шөғөлө тураһында ҡыҙыҡлы ла, фәһемле лә итеп, аманат һымаҡ яҙып ҡалдырған.

Ҡырағай бал ҡорттары тәбиғи мөхиттә үҙ ихтыярҙарынса йәшәй, кәрәк мәлдә осош яһай, ҡышын ҡаты һыуыҡтарға ла бирешмәй. Улар эшкә өлгөр, сәскәләргә шат һәм ғәмәлдә донъяларына әҙәм заттарының йыш ҡыҫылыуынан, борсоуынан азат. Ризыҡтары ла ғәҙәттәге умарта балынан айырыла. Солоҡ балы һоро йәшелһыу төҫмөрләнешле ҡуңыр көрән төҫтә, балауыҙ, һитә, һеркә менән ҡушымталы, татлыраҡ һәм хуш еҫлерәк. Белгестәрҙең фекеренсә, ул өлгөргәнерәк, тәбиғи матдәләргә, микроэлементтарға, аминокислоталарға байыраҡ. Мөһим үҙенсәлеге — ферменттар күплегендә, һыу, сахароза аҙлығында, кислоталылыҡ түбәнлегендә. Шуға ла башҡорт солоҡ балының даны бөтә донъяға билдәле. Хатта ул күккә ашып, ғаләм киңлектәренә сығып, ”Мир” орбиталь станцияһында Рәсәй космонавтарына туҡлыҡлы тәғәм булды.

Башҡорт солоҡ ҡортон өйрәнеү өсөн СССР Фәндәр академияһы профессор Г.А.Кожевников етәкселегендә 1929 йылда Башҡортостандың Бөрйән районына экспедиция ойоштора. Ике йыл буйы ентекле тикшеренеүҙәр алып барып, ул йыйылған материалдар нигеҙендә ҡыҙыҡлы һығымталар яһай. Бөрйән солоҡ ҡорто метисланмаған, йәғни башҡа ҡорттар менән ҡушылмаған, саф тоҡомло һәм, профессор Кожевников ғилми билдәләмә биреүенсә, ”тарихҡаса булған” бик боронғо бал ҡорто. Уның үҙенсәлектәре шундай. 1. Бал ҡорттары үҫеп ултырған ҡарағайҙарҙың һәм ҡарағастарҙың ерҙән ун биш-егерме метр бейеклектәге солоҡтарында йәшәп, ҡышын 40—45 градус температуралы һыуыҡтарҙы ла бына тигән үткәрә һәм өшөмәй, туңмай тиерлек. 2. Солоҡ ҡорттары юғары продуктлы. Ҡорт бағыусы, һәйбәт ҡышлауҙы тәьмин иткән аҙыҡ запасы ҡалдырып, солоҡ күсенән бер миҙгелдә ике ботҡа хәтлем кәрәҙле бал ала. 3. 1928—1929 йылдарҙа рамлы умарталарға күсерелгән солоҡ бал ҡорттары күстәре Ғәҙелгәрәй ауылында Ш.Сәғитов, Яңы Монасипта Н.Буранов умарталыҡтарында ҡарар-ҡарамаҫ торошта ла һәр оянан бишәр ботҡа тиклем бал биргән. 4. Солоҡ ҡорттарында һәм уларҙың тоҡомдарында сереү (гнилец), нозематоз ауырыуҙары юҡ. Уларҙың организмы зарарлы сирҙәргә бирешмәй. 5. Микроскопик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, урта урыҫ тоҡомо менән сағыштырғанда солоҡ ҡортоноң томшоғо оҙонораҡ.

Профессор Кожевников башҡорт солоҡ ҡорто һәм балы тураһында экспедиция мәғлүмәттәрен Фәндәр академияһы хеҙмәттәрендә һәм Көнбайыш Европа журналдарында баҫтырып сығара һәм ил, сит ил ғалимдарының ҙур ҡыҙыҡһыныуын уята, башҡорт солоҡ бал ҡортоноң селекция-тоҡомсолоҡ эшендә ҙур әһәмиәткә эйә буласағын билдәләй (”Пчеловодство” журналы, 1947, № 6). Был изге теләк, ҡыуанысҡа күрә, теләк килеш кенә ҡалманы, ”Шүлгәнташ” ҡурсаулығы ”Алтын солоҡ” дәүләт тәбиғи заказнигы ойоштороп, 1997 йылдан Бөрйән солоҡ бал ҡортон ишәйтеү, уның йәшәү биләмәләрен киңәйтеү буйынса планлы эш алып бара.

Башҡорт бал ҡорто башҡа тоҡомдарҙан ҡуңыр һоро төҫө һәм эрерәк булыуы менән айырылып тора. Йәнә, күберәк күс айырыуы, һыуыҡҡа бирешмәүсәнлеге, алты-ете ай буйы оянан осоп сыҡмай тора алыу

һәләте, варратоз, европа сереге, нозематоз, токсикоз ауырыуҙарына бирешмәүсәнлеге менән. Балауыҙ яһау, манса йыйыу буйынса башҡорт бал ҡорто бөтә тоҡомдарҙан етеҙерәк, алдымыраҡ. Айырыуса йүкәнән бал йыйыуға ныҡ ҡулайлашҡан. Өҫтәлмә бал миҡдарын туплау ҙа уның мөһим үҙенсәлеге. Бал килеме көслө мәлдә башҡорт бал ҡорттары умартаның икенсе ҡатын ғына түгел, ә мисәтләнмәгән бала яҭҡылығы күҙәнәктәрен дә татлы һут менән тултыра. Баллы кәрәҙ күҙәнәктәрен мисәтләгәндә күҙәнәктәге бал һәм уның балауыҙ ҡаплауысы араһында һауа ҡалдыралар. Бындай бал бик сифатлы була. Умартасылыҡ буйынса Бухареста 1965 йылда үткән XX халыҡ-ара конгреста башҡорт бал ҡорто диплом һәм көмөш миҙал менән бүләкләнә.

Башҡортостандың танылған умартасыһы Василий Николаевич Власов яҙыуынса, бал ҡорто ғәли йәнәптәре — тәбиғәттең ғәжәп бүләге. Солоҡтарҙа йәшәгән дәүерҙәрҙән бирле бал ҡорттары кешеләргә тоғро булып, сәләмәтлек эликсиры бүләк итә, ерҙә сәскәле үҫентеләрҙе һәм бөтә тәбиғәтте һаҡлай. Планетабыҙҙа экологик тотороҡлолоҡ булдырыуға тос өлөш индергән бал ҡортона кешеләр рәхмәтле. Японияның Гифу ҡалаһында скульптор Осаму Тежема проекты буйынса бал ҡортона монумент ҡоролған. Уны асыуға бал ҡортона йыр һәм гимн яҙылған. Словакияла шулай уҡ бал ҡорто скульптурала мәңгеләштерелгән. Әүәл Рәсәйҙең умартасылыҡ шөғөлө үҫешкән бәғзе губерналарының һәм ҡалаларының гербтарында бал ҡорттары йәки умарта һүрәтләндерелгән. Әйтәйек, Медынь, Тамбов ҡалаларының гербтарында өсәр көмөш бал ҡорто, Севастополь, Усть-Каменогорск ҡалаларының гербтарында бал ҡорттары менән умарта, Белоруссияның Игумена, Климовичи ҡалаларының гербтарында ла бал ҡорто төшөрөлгән булған. Башҡорт бал ҡорттарының һәм умартасыларының эшһөйәрлеген һәм бөйөклөгөн Урал мәрмәрендә мәңгеләштереү яҡшы булыр ине.

Башҡорт иленең тау-урман төйәгендә урынлашҡан Бөрйән районы биләмәләренең үҫемлектәр донъяһы үҙенсәлекле. Бында иң күп бал һуты биргән үҫемлек — ваҡ япраҡлы йүкә. Ул ике-өс аҙна сәскә атыу мәлендә "Бөрйән" бал ҡорто әллә күпме хуш еҫле тәбиғәт тәғәмен йыйып өлгөрә. Уның эшһөйәрлегенә хайран ҡалырлыҡ.

Рәсәй биләмәләрендә ҡырағай солоҡ ҡорто Башҡортостанда ғына һаҡланған. Ул "Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығында һәм "Алтын солоҡ" заказнигында ҡурсауға алынған. Беҙҙең заманда бик аҙ һандағы кешеләр, ғәйәт һирәк һөнәр оҫталары ғына солоҡсолоҡ шөғөлө һөнәренә эйә. Ә солоҡ балын яратыусылар, юғары баһалаусылар бихисап. Бөрйән, Белорет, Ишембай райондарында эре урман хужалыҡтары, ағас әҙерләүселәр аң-тоң белмәй байтаҡ солоҡ ағасын харап итте. Шул хәҡиҡәт: ҡырағай ҡорттарҙы, солоҡтарҙы тәбиғәттең асылын боҙмағанда ғына һаҡлап ҡалырға мөмкин. Әйткәндәй, 2005 йылдың көҙөндә "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре, Бөрйәндең Асҡар ауылы ҡортсолары солоҡ балын Өфөгә йәрминкәгә алып килде. Хаҡы ҡәҙимге умарта балынан өс-дүрт тапҡырға ҡиммәт булыуға ҡарамаҫтан, уны бик теләп һатып алдылар.

Әлбиттә, хәҙер үткән быуаттар менән сағыштырғанда ҡырағай бал ҡорттары ла, солоҡтар ҙа, уларҙы ҡараусылар ҙа аҙ. Мәгәр быға бәйле һирәк һәм мажаралы хәлдәр булғылай. Бөрйән районында Хәмит исемле

ҡәрҙәшебеҙ көҙөн утынға тип, ғәйәт ҙур ҡороған имәнде йығып, тракторға тағып өйөнә һөйрәтеп алып ҡайта һәм ”Дружба” бысҡыһы менән уны түмәрҙәргә бүлгеләй башлай. Эргәһендә улы булышып йөрөй. Ҡапыл бысҡы һүнеп, туҡтап ҡала. Улы әйтә: ”Атай, имәндә нәмәлер гөжләй”. Хәмит ентекләп ҡараһа, бысҡы юлынан бал һарҡа, эстә бал ҡорттары ҡуҙғып, безләй, геүләй. Ул һаҡ ҡына солоҡто кәрәгенсә бысып алып, йәһәт кенә тишектәрен бөтәштерә һәм уны йәтешләп баҡсаһына ултырта. Был ғәжәп табышҡа Хәмит үҙе лә, ғаиләһе лә ҡыуана. Ботаҡлы имәнде бысып ауҙарғанда, алып ҡайтҡанда ла кәрәҙ боҙолмаған, бал ҡорттары туҙмаған. Балы иһә ашап туйғыһыҙ.

## Йүкә балы, сәскә балы...

Ҡурай, ҡымыҙ һымаҡ, башҡорт балы — башҡорт халҡының илгә, милләткә ҡот, дан-шөһрәт килтергән тылсымы. Тәбиғи матдәләренең төрлөлөгө, шифаһы, им-дауа үҙенсәлектәре, туҡлыҡлығы, тәме буйынса донъяла уның тиңе юҡ. Был Көньяҡ Уралдың, Башҡортостандың йәннәттәй еренән, үҙенсәлекле үҫемлектәр донъяһынан, тәбиғәт шарттарынан. Бал биргән үҫемлектәр төрө генә өс йөҙләп. Улар үҫкән, сәскә атҡан мөхит киң, иркен. Әйтәйек, Рәсәйҙә йүкә урмандары биләгән даирәнең өстән бер өлөшө — Башҡортостанда. Быға һәр тараф һоҡланырлыҡ һәм көнләшерлек.

Йүкә, ҡарабойҙай, ҡандала үләне, йылҡы борсағы кеүек бер төрлө үҫемлектәр сәскәһенән (монофлора), йәнә төрлө болон, туғай сәскәләренән (полифлора) йыйылған бал юғары сифатлы һанала. Умартасылыҡ белгесе Василий Власов ”Башҡортостан балы” китабында яҙыуынса: ”Өлгөргән стандартлы башҡорт балы 18—19 процент һыуҙан һәм 82 процентҡа тиклем шәкәрле ҡоро матдәнән тора. Унда 35 процент виноград шәкәре (глюкоза), 40 процент емеш шәкәре (фруктоза), 2 процент сахароза һәм 0,1 процент аҡһым, йәнә ферменттар, гормондар, егермегә яҡын аминокислота, минерал, хуш еҫ һәм төҫ биргән матдәләр бар”.

Йүкә балы — иң билдәле, иң сифатлы балдарҙың береһе. Ҡайһы урында йыйылыуына бәйле тәме, төҫө төрлөсәрәк. Ғәҙәттә ул хуш еҫле, асыҡ һары төҫлө, йәки еңелсә йәшелһыу. Ҡуйырғаны иретелгән туң май һымаҡ йәиһә бөртөклө. Башҡорт йүкә балы аҡһыл гәрәбә кеүек һәм ҡеүәтле, татлылығы, хуш еҫлелеге буйынса Рәсәйҙә иң яҡшы һанала. Умартасылыҡ белгестәренең фекеренсә, өс-дүрт йүкә ағасы бер гектар ерҙәге ҡарабойҙай биргән миҡдарҙа бал бирә. Йүкә сәскә атҡан мәлдә йүкәлекле төйәктәрҙә бер көс көнөнә ун-ун биш килограмм һут



ташый. Сәскәләрҙә һут күп саҡта ул ҡояшта ысыҡ тамсылары кеүек ялтырай. ”Бал ямғыры”, ти быңдай күренеште солоҡсолар. Башҡорт йүкә балы ләззәте, ҡөҙрәте менән хуш, бактерияларҙы һәм микробтарҙы ишһенмәҫ үҙенсәлектәре менән баһалы. Айырыуса һалҡын тейҙергәндә, үпкә ауырығанда килешкән им. Уны ашҡаҙан-эсәк юлдары шешкәндә, бөйөр, йөрәк ауыртҡанда, йәрәхәттәрҙе, бешкән урындарҙы дауалағанда ҡулланалар.

Төрлө-төрлө баллы үҫемлектәрҙең сәскә һуттарынан йыйылған һәм һәммәһенең ҡөҙрәтен туплаған бал да ифрат та шифалы һәм ҡиммәтле. Әйтәйек, яҙғы балда май—июнь айҙарында сәскәләнгән үгәй инә үләне, бәпембә, баллыҡай, тал, ҡарағат, саған кеүек егерменән ашыу үҫемлектең һуты һәм һеркәһе бар. Йәйге балда — йүкә, миләш, ҡыҙылхан, йылан көпшәһе, еҫле балтырған, фаягөл, ҡайын еләге, болон яраны, аҡ тумырҙҡабаш, гөлйемеш, ҡурай еләге, әрекмән, мәтрүшкә, ҡымыҙлыҡ, арыҫлан ҡойроғо, ҡыҙыл көртмәле, һары мәтрүшкә, ҡуян кәбеҫтәһе, алтын тамыр кеүек бихисап үҫемлектәрҙең ҡөҙрәте. Уларҙың күбеһе — тәбиғи дауа сеймалы, үҙҙәре дарыу үләне. Ошо үҫемлектәрҙән йыйылған ҡатнаш бал, һис шикһеҙ, мөғжизәле дауалау үҙенсәлектәренә эйә. Ул кеше тәнендә матдәләр алмашыныуын яҡшырта, биохимик процестарҙы тиҙләтә. Балда уны оҙаҡ һаҡларға шарт тыуҙырған бактерияларҙы юҡ итеү үҙенсәлегенә эйә биоген стимуляторҙар бар.

Ҡарабойҙай балы ғәмәлдә Башҡортостандың дала яҡтары умарталыҡтарында йыйыла. Ҡыҙғылтыраҡ ҡуйы көрән, ҡуйы һары төҫтә, хуш еҫле. Унда аҡһымдарҙан, углеводтарҙан (глюкоза, гликоген, шәкәр...), майҙарҙан тыш, кеше организмы өсөн аҙ миҡдарҙа кәрәк булған тимер, кальций, фосфор, баҡыр, цинк, бор, йод, никель, кобальт кеүек микроэлементтар, шулай уҡ $B_1$, $B_2$, РР витаминдары һәм рутин бар. Һәйбәт антисептик булараҡ, ҡарабойҙай балы трофик сей яраларҙы, эренле йәрәхәттәрҙе, сиҡан ҡалҡыуын һәм башҡа тире ауырыуҙарын имләүҙә шифалы.

Тумалаҡ сәскәле клевер, йәғни тумырҙҡабаш, туҡранбаш һутынан етештерелгән бал асыҡ һарғылт төҫлө, 41 процентҡа тиклем фруктозалы, яй ҡуйыра. Монофлор балдарҙан клевер балы иң яҡшыларҙың береһе һанала. Ул хәлһеҙләнгәндә, көсһеҙләнгәндә диетик ризыҡ, гинекология ауырыуҙарын, гемморойҙы дауалауҙа йоғонтоло.

Ваҡ ҡына киртләс япраҡлы, һабаҡ буйлап сыҡҡан аҡ, һары сәскәле, хуш еҫле ҡандала үләне балы төрлө төҫлө: аҡ йәшелһыу төҫмөрләнешле, асыҡ гәрәбә сағылышлы... Фруктоза 40 процентҡа тиклем тәшкил итә, үҙенсәлекле еҫ аңҡыта, еңелсә генә әсе тәмле, татлы. Эсәктәр атонияһын дауалағанда юғары терапевтик йоғонтоға, йәнә эс йомшартҡыс, эс китергес тәьҫиргә эйә һәм шундай дарыуҙарҙы алмаштыра ала.

## Дан шөғөл

Умартасылыҡ хужалығы нык үҫешкән ил шөһрәтен, башҡорт балы данын һаҡлап ҡалыу, донъяға танытыу өсөн бай тәбиғәтебеҙ ҙә, көс-ҡөҙрәтебеҙ ҙә бар һәм был юҫыҡта йәнтөйәгебеҙҙә мөһим саралар ҙа күрелә. 1995 йылда Рәсәй Федерацияһында беренсе булып, ”Умартасылыҡ тураһында” Башҡортостан Республикаһы Законы, 2004 йылда

уның яңыртылған редакцияһы ҡабул ителде. Был закон бал ҡорттарын үрсетеү, ҡарау, һаҡлау, ауыл хужалығы үҫемлектәрен һеркәләндереүҙә файҙаланыу, ҡортсолоҡ түлектәрен алыу, уларҙы эшкәртеү, шулай уҡ умартасылыҡтың һөҙөмтәлелеген күтәреүгә шарттар тыуҙырыу, кешеләрҙең һәм ойошмаларҙың хоҡуҡтарын, мәнфәғәттәрен яҡлауҙы тәьмин итеү эшмәкәрлегенең хоҡуҡи һәм иҡтисади нигеҙҙәрен билдәләй. 2006—2010 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһында умартасылыҡты үҫтереү концепцияһы һәм маҡсатҡа ярашлы программа бар. Умартасылыҡ тармағын үҫтереүгә республика бюджетынан дотация бирелә.

Умартасылыҡ белгестәрен әҙерләү ҙә уңышлы хәл ителә. Башҡорт дәүләт аграр университетында ҡортсолоҡ буйынса юғары белемле, Аксен ауыл хужалығы техникумында махсус урта белемле зооинженерҙар уҡытып сығарыла, йәнә профессиональ техник училищеларҙа һәм лицейҙарҙа егеттәр һәм ҡыҙҙар бал ҡорттарын ҡарау серҙәренә өйрәтелә. Ҡортсолоҡ тураһында тәүге белешмәләр, мәғлүмәттәр иң алда Бөрйән районы мәктәптәрендә өйрәнелә башланы. 1999 йылда Башҡортостан Мәғариф министрлығы ауыл мәктәптәрендә умартасылыҡҡа уҡытыу программаһын ҡабул итте һәм ул инде йөҙҙән ашыу мәктәптә бойомға ашырыла. Башҡортостан ”Китап” нәшриәте X—XI синыфтар уҡыусылары өсөн умартасылыҡ буйынса дәреслек баҫтырып сығарҙы. Мәктәптәрҙә ”Ҡортсолоҡ нигеҙҙәре” дәрестәрен биреү, һис шикһеҙ, йәш быуынды хеҙмәткә өйрәтеүҙә һәм рухи яҡтан тәрбиәләүҙә йәйғорло йүнәлеш, ырыҫлы даирә булып тора.

”Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү”ҙең дәүләт программаһында билдәләнеүенсә: ”Башҡортостандың тау-урман төйәгендә (Бөрйән районы) беҙҙең заманда донъя көнитмешендә оҡшашы юҡ күренеш — ҡырағай бал ҡорттарын ҡарау ысулы һаҡлана. Һыуыҡҡа сыҙамлы ”Бөрйән” бал ҡортон тергеҙеү һәм күрше районДарҙа таратыу менән бергә, уларҙы умарталыҡтарҙа ишәйтеү зарур”. Ҡыуаныстка күрә, был изге маҡсат ныҡлы нигеҙҙә бойомға аша.

Башҡортостан Республикаһының ”Умартасылыҡ тураһында” Законына ярашлы рәүештә умартасылыҡ тармағының ғилми-ғәмәли мәсьәләләрен хәл итеү өсөн 1998 йылда ”Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге” дәүләт учреждениеһы ойошторолдо. Республикала умартасылыҡ һәм апитерапия өлкәһендә ул — баш, етәкләүсе учреждение. Уға ҡортсолоҡ буйынса күҙәтеү, тикшереү вазифаһы ла йөкмәтелгән. Эшмәкәрлегендә иһә иң мөһим йүнәлештәре: башҡорт бал ҡортон һаҡлау, үрсетеү, ишәйтеү һәм уның таралыу даирәһен киңәйтеү; халыҡтан ҡортсолоҡ ризыҡтарын һатып алыу һәм уларҙы эшкәртеү; ҡортсолоҡтоң юғары сифатлы һәм экологик йәһәттән таҙа ниғмәттәрен етештереү өсөн ҡулай шарттар булған тәбиғи биләмәләрҙе асыҡлау; ҡортсолоҡ ниғмәттәре, дарыу үләндәре сығанағында апитерапия буйынса дауалау үҙәгендә дауа сараларын һәм биологик актив өҫтәмәләрҙе эшләү, камиллаштырыу һәм ҡулланыу. Ошондай мөһим бурыс йөкмәтелгән һәм уларҙы ғәмәлләштергән ғилми-тикшеренеү үҙәген биология фәндәре докторы, үҙ шөғөлөнөң оҫтаһы Әмир Миңлеәхмәт улы Ишемғолов етәкләй.

Башҡорт бал ҡортон һаҡлау, үрсетеү өсөн ғилми-тикшеренеү үҙәгенең Архангель, Ғафури, Иглин, Нуриман, Күгәрсен, Ейәнсура районда-

рында ойошторолған алты ғилми-эксперименталь станцияһы, ҡырҡ һигеҙ умарталығында биш меңдән ашыу оя ҡорт бар. Саф тоҡомло түлле инә ҡорттар сығарыу буйынса селекция эше дауам итә. Бының өсөн Иглин һәм Нуриман райондарында саф тоҡомло инә ҡорттарҙы саф тоҡомло ата ҡорттар менән аталандырыу өсөн бөтә нормаларға һәм талаптарға яуап биргән ике тороҡтороу пункты булдырылған.

Рәсәй дәүләт стандарты һәм донъяның ун һигеҙ иле стандарты буйынса республикабыҙҙың бөтә райондарында йыйылған ҡортсолоҡ ризыҡтарына анализ яһалды. Был башҡорт балын донъя баҙарына сығарырға мөмкинлек тыуҙырҙы. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә Башҡортостандың егерме ике районында экологик яҡтан таҙа бал, һитә, прополис алыу шарттары булған уңайлы тәбиғи мөхит асыҡланды. Республикабыҙҙың төп тәбиғи ауыл хужалығы зоналары буйынса оҙаҡ йылдар дауамында тәүге тапҡыр ҡортсолоҡ ризыҡтары йыйыу урындары асыҡланды, һәр район буйынса фәнни йәһәттән дәлилләнгән күпме оя бал ҡорто тотоу ихтималлығы, мөмкин булған ҡәҙәр бал алыу миҡдары билдәләнгән, бал һуты биргән ауыл хужалығы үҫемлектәре тураһында мәғлүмәттәр дөйөмләштерелгән. Йәнә, башҡорт бал ҡортон сығарыу, тоҡомон үрсетеү, ҡортсолоҡ ризыҡтарының сифатын баһалау, ҡортсолоҡ ниғмәттәре нигеҙендә ашамлыҡтар, косметик нәмәләр етештереү буйынса методик тәҡдимдәр, күрһәтмәләр, умартасылыҡ тураһында ғилми хеҙмәттәр донъя күрҙе. Өфө дауаханалары менән берлектә бал ҡорто тәғәмдәрен медицинала, аныҡлыраҡ әйткәндә, инә ҡорт һөтөн онкологик сирҙәрҙе, балды төрлө фитоөҫтәлмәләр менән йөрәк, ашҡаҙан-эсәк юлы ауырыуҙарын дауалағанда ҡулланыу юҫығында тикшеренеүҙәр алып барыла.

Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәгенең бер нисә цехтан торған тәжрибә-эксперименталь бүлеге лә бар. Беренсеһендә балауыҙ етештерелә, икенсеһендә һауыттарға бал һалына һәм ҡортсолоҡ ризыҡтары нигеҙендә туҡланыу ашамлыҡтары әҙерләнә, өсөнсөһөндә бал һалыу өсөн һауыттар эшләнә, лабораторияла балға һәм башҡа аҙыҡтарға анализ яһала, оҫтаханала умартасылар өсөн кейем тегелә. Башҡарылған эштәр, тикшеренеүҙәр, бал ҡорто донъяһы тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, фәһемле белешмәләр, яңылыҡтар, файҙалы кәңәштәр ғилми-тикшеренеү үҙәгенең рус телендә нәшер ителгән ”Умартасылыҡ һәм апитерапия” журналында баҫыла.

Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге 2005 йылдың август айынан башлап Америка Ҡушма Штаттарына башҡорт балын ебәрә башланы. Тәүҙә ул Флорида штатының өс бойондороҡһоҙ лабораторияһында тикшерелә. Америка белгестәренең һығымта яһауынса, башҡорт балы сифаты буйынса АҠШ балынан һиҙелерлек өҫтөн, ә ферментатив әүҙемлеге (диастаз һаны) иһә Америка стандартынан дүрт тапҡырға юғары булып сыға. Хуш еҫлелеге һәм тәме буйынса ла башҡорт балы америка супер аҙығынан күпкә яҡшы тип билдәләнә. Аргентина, Канада, Ҡытай, Мексика, Польша балы менән тулы донъя баҙарына, океан аръяғына үҙенсәлекле, экологик яҡтан таҙа башҡорт балы үтеп инеүе ҡыуаныс. Уны Англия, Германия, Төркиә, Һиндостан, Япония илдәре халыҡтары ла яҡшыраҡ, күберәк беләсәк. 2004 йылдың сентябрь айынан иһә Башҡортостан умартасы-

лыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге Рәсәйҙең егерме һигеҙ өлкәһен һәм республикаһын башҡорт балы менән тәьмин итә. Шулай итеп, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге башҡорт балын һәм уның нигеҙендә әҙерләнгән ниғмәттәрҙе Рәсәй һәм бөтә донъя кимәлендә күрһәтә һәм таныта. Халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә һәм йәрминкәләрҙә улар илленән ашыу алтын миҙалға лайыҡ булды.

Башҡортостандың символына әйләнгән, шифаһы һәм тәме буйынса донъяла тиңе юҡ башҡорт балының баһаһы һәм шөһрәте юғары булырға тейеш. Мәгәр "Башҡорт балы" абруйы, дәрәжәһе менән Рәсәйҙең башҡа региондары умартасылары һәм эшҡыуарҙары ла файҙалана башланы. Әйтәйек, Санкт-Петербургта үткән "Агрорусь — 2004" халыҡ-ара күргәҙмә-йәрминкәһендә ун ете сауҙа нөктәһендә "Башҡорт каштан балы", "Башҡорт акация балы", "Башҡорт һырғанаҡ балы" һымаҡ этикеткалар менән бал һатыла. Ә бит Башҡортостанда ындай атамалы айырым балдар йыйылмай, каштан ағасы иһә бөтөнләй үҫмәй. Башҡорт балының шөһрәтен һаҡлау, республикабыҙ умартасыларын яҡлау өсөн "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт учреждениеһы Роспатентҡа, йәғни интеллектуаль милек, патент һәм тауар знактары буйынса федераль службаға мөрәжәғәт итте һәм 2005 йылдың октябрендә "Башҡорт балы" тауарының барлыҡҡа килеү урынын, сығышын күрһәткән хоҡуҡ менән файҙаланыуға танытма алды. Хәҙер Рәсәй Федерацияһында фәҡәт ул ғына "Башҡорт балы" атамаһын ҡулланырға хоҡуҡлы: тауарҙа, этикеткала, рекламала, документтарҙа...

Башҡорт балы 1900 йылда Парижда, 1961 йылда Эрфуртта (Германия), 1971 йылда Мәскәүҙә үткән халыҡ-ара күргәҙмә-йәрминкәләрҙә алтын миҙалдарға, 2002 йылда Берлинда "Йәшел аҙна" халыҡ-ара йәрминкәһендә иң юғары наградаға, һуңғы йылдарҙа Санкт-Петербургта "Агрорусь", Мәскәүҙә "Алтын көҙ" күргәҙмә-йәрминкәләрендә алтын һәм көмөш миҙалдарға лайыҡ булды.

## Сәләмәтлек сихәте

Ер йөҙөндә йәшәгән төрлө ҡәүемдәр тәүтормош заманынан уҡ бал ҡорттарын белгән һәм бал менән туҡланған. Египет папирустарында, ғәрәп дауалау белешмәләрендә, боронғо китаптарҙа, Ҡөрьәндә, Библияла һәм табиптарҙың, философтарҙың хеҙмәттәрендә балдың кеше һаулығы өсөн әһәмиәте, уны ҡулланыу буйынса кәңәштәр һаҡланған. Боронғо Египет пирамидалары һәм төрбәләре бында йәшәгән кешеләрҙең балды, прополисты им-дауа, йәнә боҙолоу-сереүҙән һаҡлау сараһы булараҡ файҙаланыуҙары тураһында һөйләй. Балдың бындай үҙенсәлектәрен Римдә йәшәүселәр ҙә белгән. Гладиаторҙар алыш алдынан бал менән ризыҡланып ҡөҙрәтләнгән.

Боронғо Грецияла бал ҡорттарын ҡарау, үрсетеү буйынса тәүге мәғлүмәттәр тупланған. Тәбиғәттең сәләмәтләндереү ҡөҙрәтен дауаланыуҙың нигеҙе итеп иҫәпләгән табип Гиппократ дауалау тәжрибәһендә балды киң ҡулланған. Мәшһүр философ Пифагор үҙенең оҙон ғүмеренең сере бал икәнен белдергән: "Эсегеҙҙе бал менән һуғарығыҙ", — тигән. Философ Демокрит та балдың сәләмәтлеккә һәм оҙон ғүмерле-

леккә булышлығын раҫлаған. Ул бал болғанған һыуҙы нервыларҙы тынысландырыуу һәм йоҡоно һәйбәтләү өсөн тәҡдим иткән. Гомерҙың ”Илиада”, ”Одиссея” эпик поэмаларында Агамеданың яугирҙар өсөн тәмле бал эсемлеге әҙерләүе әйтелә. Боронғо Зевс тураһындағы миф-та Кронос тарафынан үлемгә дусар ителгән бәпесте нимфалар мәмерйәлә һөткә бал болғап туйындырған.

Ғәрәптәр балды Хоҙай тәғәләнең тәғәме, әҙәмдәргә бүләге иҫәпләгән һәм ҡорт бағып, ошо изге тәғәм менән ризыкланған. Мөхәммәт пәйғәмбәр ҡәүемдәренә: ”Бал ашағыҙ, һауығырһығыҙ”, — тигән. Атаҡлы табип һәм философ Ибн Сина балды тәнде сәләмәтләндереүсе, ғүмерҙе оҙайтыусы ризыҡ вә им булараҡ тәҡдим иткән: ”Әгәр йәшлегеңде һаҡлағың килһә, мотлаҡ бал аша. Ул тәнде нығыта, дәрт өҫтәй, аҙыҡты яҡшыраҡ эшкәртеүгә булышлыҡ итә, ашау теләге тыуҙыра. Бал аҡылды аса, телде үҫтерә”. ”Табиплыҡ фәне ҡануны” хеҙмәтендә Ибн Сина балды саф килеш һәм башҡа ризыҡтар менән ҡулланыу буйынса йөҙ илле тәҡдим әйтә. Мәҫәлән, ул баллы гранат һуты менән йөрәк сирлеләрҙе дауалаған, ҡырҡ биш йәштән һуң балды даими рәүештә ҡулланырға һәм айырыуса грек сәтләүеге менән бергә туҡланырға тәҡдим иткән.

Туҡланыу тәғәме һәм дауаланыу сараһы булараҡ, бал Һиндостанда ла юғары баһаланған, тереклек ыуы менән ағыуланғанда ағыуға ҡаршы торорлоҡ им итеп ҡулланылған. Субтропик климатлы Палестинала, уның тау-ҡаяларында ла ҡырағай бал ҡорттары күстәре мыжғып торған, уларҙы эйәләштереп, ҡортсолоҡ шөғөлө тыуған. Боронғо һинд медицина трактатында (Аюр Веде) бал менән дауалау ентекләп яҙылған.

Бал — бик тә татлы, туҡлыҡлы, шифалы һәм диетик үҙенсәлектәргә эйә ризыҡ. Ул ашаған ашамлыкты эшкәртеүҙе һәм үҙләштереүҙе һиҙелерлек яҡшырта. Икмәк, бутка, һөт, буҙа, ҡаймаҡ, май, эремсек, талҡан, ҡорот, торма, шалҡан, һуған, һарымһаҡ, кишер, сәтләүек, өрөк, йөҙөм, хөрмә, сейә, дунала, ҡарағат, гөлйемеш, ҡурай еләге, ер еләге, көртмәле кеүек бихисап аҙыҡ-түлек, еләк-емеш, йәшелсә менән дә бал бик файҙалы, баһалап бөткөһөҙ. Мәгәр һәр тәғәм һымаҡ, уны ҡулланғанда ла сама белергә кәрәк. Шуға тормоштан бер хәлде һөйләйек.

Атайым бал айырған мәлдә ауылыбыҙҙың ир-егеттәре берәр стакан шыйыҡ бал эскәндәре, һай, шәп булып ҡалды, тиеүҙәре хәтерҙә. Шулай бер көн ”ауыл батшаһы” бригадир килеп инә лә: ”Ағай, беләһең, мин ныҡ, донъяның тотҡаһы кеше. Эсер балыңды ете-һигеҙ сөңкә, һал әйҙә, йәлләмә!” — ти. Ярамай, тиеүгә ҡарамаҫтан, эсә был. Шөбһәләнеп, атайым оҙата сыға. ”Батша” күп тә бармай, атынан йығылып төшә, шунан аҙна буйы бер нәмә лә ашай алмай ята. Бал ғәйәт ҡөҙрәтле лә, туҡлыҡлы ла шул.

Әҙәм нәҫеле балды татып белгән дәүерҙән бирле ул — им-дауа сараһы. Шифаһы меңәр йылдар буйы һыналған һәм быны хәҙерге заман медицинаһы ла таный. Унда тереклек итеү, ҡанды байытыу һәм яңыртыу өсөн кәрәк булған иң мөһим микроэлементтар бар. Бал матдәләр алмашыныуын, тере күҙәнәктәрҙең үҫешен, эске органдарҙың, ашҡаҙан-эсәк юлының эшмәкәрлеген, тирене туҡландырыуҙы яҡшырта, йоҡоно һәйбәтләй, тәнгә көс-ҡөҙрәт өҫтәй, шеш ҡайтара, бактерияларҙы бөтөрә... Ололарға ла, йәштәргә лә, балаларға ла сихәтле. Балалар

бал менән үçеү өсөн кәрәк гормондар, микроэлементтар, ферменттар ала, бал ашаған үçмерҙәр физик яҡтан һәм аҡыл йәһәтенән дә нығыраҡ үçешә, алдымыраҡ була.

Балдағы виноград шәкәре (глюкоза), емеш шәкәре (фруктоза) кеүек органик берләшмәләрҙе организм еңел үҙләштерә һәм улар кешенең йәшәү эшмәкәрлеге өсөн кәрәк ҡеүәт сығанағы булып тора. Глюкоза мейегә ҡөҙрәт бирә, фруктоза менән лактоза йөрәк, нервы системаһының, мускулдарҙың һәйбәт, теүәл эшләүен тәьмин итә, ферменттар, витаминдар аш һеңдереүгә, матдәләр алмашыныуына, эске секреция биҙҙәре эшенә ярҙам итә.

Көн һайын һыуҙа шыйыҡлап дүрт ҡалаҡ бал ҡабыу ҡанда антиоксидандарҙы арттыра, бал менән миндаль ашау холестерин кимәлен кәметә һәм шуның һөҙөмтәһендә йөрәк-тамыр ауырыуҙарына юл ҡуймай. Үҙәк нервы системаһы ҡаҡшағанда, тиҙ ярһығанда, арығанда берике ай кис, иртән — утыҙ, төштән һуң ҡырҡ-алтмыш грамм бал тәҡдим ителә. Төнгөләккә бер стакан йылы һыуға бер ҡалаҡ бал бутап эсеү тынысландыра, йоҡоно яҡшырта.

Гипертония ауырыуына, юғары ҡан баçымын төшөрөүгә халыҡ медицинаһында түбәндәге им сараһы ҡулланыла: берәр стакан бал, кишер, сөгөлдөр, керән һуты һәм бер лимон һуты бергә ҡушыла һәм ашарҙан бер сәғәт алда йәки ашағандан ике-өс сәғәттән һуң тәүлегенә өс мәртәбә бер-ике балғалаҡ ике айға хәтле ҡабул ителә. Бауыр ауыртҡанда иртән берәр ҡалаҡ бал, инә ҡорт һөтө, төштән һуң бал, һитә, йәиһә иртән-кис бал менән алма һуты ҡулланыу файҙалы. Йәнә, бер килограмм балға шул тиклем ҡарағат бутап, берәр ҡалаҡ бөткәнсе ашайҙар.

Ашҡаҙан-эсәк ауыртҡанда берәр ҡалаҡ балды, кипкәрҙе (сушеница) бер стакан ҡайнар һыуға һалып, утыҙ минут тотҡандан һуң, көнөнә өс мәртәбә икешәр ҡалаҡ эсәләр. Йыуан эсәк тиресәһе шешкәндә (колит) дүрт стакан һыуға йөҙ һикһән грамм бал, илле грамм һеркә болғайҙар, бер нисә көндән һуң ашарҙан алда яртышар стакан эсәләр. Һыуға йәки алма һутына ҡушып, тәүлегенә һикһән-йөҙ грамм бал, көнөнә өс мәртәбә берәр балғалаҡ саф һитә (манса) ҡабул итеү ҙә килешә.

Грипп тейгәндә балға шул хәтлем ҡырылған һарымһаҡ болғап, төнгөләккә бер ҡалаҡ ашайҙар. Йәиһә ярты стакан ҡайнар һыуға берәр ҡалаҡ бал, гөлйемеш, ҡурай еләге, ҡарағат ҡушып, ашарҙан алда бөткәнсе эсәләр. Ангина, стоматит булғанда бер стакан ҡайнар һыуға берәр ҡалаҡ бал, ромашка болғап ауыҙҙы сайҡайҙар.

Склероз, мейе склерозы, атеросклероз кисергәндә бер стакан балға шул тиклем үк һуған һуты ҡушып, яҡшылап бутап, ашарҙан бер сәғәт алда көнөнә өс мәртәбә ҡабул итәләр. Радикулиттан, ревматизмдан интеккәндә торманы соҡоп, бал һалып, дүрт сәғәттән һуң уны ауыртҡан урынға һөртәләр.

Халыҡ медицинаһында туберкулездан, үпкә шешенән, бронхиттан дауаланыуҙың төрлө ысулдары билдәле. Эмалле кәстрүлгә йөҙәр грамм йүкә балы, аҡ май, эске суҫҡа майы һалып, утҡа ҡуйып иретәләр, мәгәр ҡайнар хәлгә еткермәйҙәр. Шунан иретмәгә йөҙ илле грамм алоэ, илле грамм какао порошогы ҡушып яҡшылап болғайҙар. Бер ҡалаҡ ҡушымтаны бер стакан ҡайнар һөткә болғап, иртән һәм кис оҙаҡ ваҡыт эсәләр. Им са-

раһын түбәндәге ҡушылмалар менән дә әҙерләйҙәр: бер килограмдан ашыу йүкә балы, ике стакан һыу, йөҙ грамм зәйтүн майы, ваҡлап туралған алоэ, егерме биш грамм ҡайын бөрөһө, ун грамм йүкә сәскәһе төнәтмәһе. Ошо ҡушымтаны көнөнә өс мәртәбә берәр ҡалаҡ ашайҙар.

Әүәл, тәьҫирле дарыуҙар юҡ саҡта, туберкулез дауалауға бирешмәгән сир ине. Шул ваҡытта беҙҙең күрше ауылдан үпкә ауырыуына дусар бер апай бик оҙаҡ район дауаханаһында ятты. Дауалаусы табип, ниһайәт, иренә әйтә: "Ҡатынығыҙҙы алып ҡайтығыҙ, ике-өс ай ғына йәшәре ҡалған". Был ауыр хәбәрҙе апай ишетеп ҡала. Ҡайтҡас, ҡайғыһынан кәрәҙле балдан әсе бал ҡоя ла эсә, ҡоя ла эсә. Байтаҡ умарта тотҡан булалар. Шулай өс-дүрт ай, ярты йыл үтеп китә, апай һаман иҫән, яҡты донъя менән хушлашмай, ә теремекләнгәндән-теремекләнә. Бер мәл ауылға табиптар килеп төшә, ни күрһендәр — апай йүгереп йөрөп ята. Район дауаханаһына алып барып, рентгендан ҡараһалар — туберкулездың эҙе лә ҡалмаған. Мансалы, прополислы, инә һөтлө кәрәҙле балдың әсе балы бына шулай үпкә сиренә шифа була.

Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге бал нигеҙендә бер нисә төрҙән торған туҡланыу-һауыҡтырыу ниғмәттәре тәҡдим итә. Балдың "Сәләмәтлек" серияһы тәбиғи балға үҫемлектәр төнәтмәһе, актив биологик өҫтәлмәләр өҫтәп әҙерләнә.

Бал менән бергә юл япрағының антисептик тәьҫире, шешеүгә ҡаршы, йәрәхәттәрҙе уңалтыуға, ауыртыуҙы баҫыуға, ҡаҡырыҡ сығарыуға йоғонтоһо арта. Эвкалипт ҡушылған бал да көслө антисептик тәьҫир яһай, ауыртыуҙы, микробтарҙы бөтөрә. Шулай уҡ календулалы бал йәрәхәттәрҙе уңалтыу, шешеүҙе, бактерияларҙы, спазманы юҡ итеү, йәнә үт ҡыуыу үҙенсәлектәренә эйә. С витамины һәм күҙле бәшмәк (чага) ҡушыулы бал да шештәргә ҡаршы тороусанлыҡты көсәйтә.

Йөрәгүлән ҡушылған балды даими ҡабул иткәндә ҡан тамырҙары баҫымы кәмей, йөрәк ауырыуына бәйле шешенеү бөтә, йоҡо һәйбәтләнә, физик әүҙемлек арта, аң-зиһен асыла. Дунала өҫтәлгән бал йөрәк-тамыр системаһы, йөрәк мускулдары эшмәкәрлеген яҡшырта, йөрәк тибеүе йышлығын, холестерин кимәлен кәметә. Бесәй үләне ҡушылған бал иһә нервы, йөрәк-тамыр системаһын тынысландыра, бәүел бүленеүҙе һәм йоҡоно һәйбәтләндерә.

Алтын тамыр ҡушылған бал организмды ҡанға ифрат та кәрәк микроэлементтар, витаминдар менән байыта, тәнгә ҡеүәт өҫтәй, дәртте күтәреүгә, һаулыҡты ныҒытыуға, оҙон ғүмерлелеккә булышлыҡ итә. Бал мумие менән бергә бөтә тән ағзаларына, айырыуса ҡан барлыҡҡа килтереүгә, һөйәктәргә, нервы системаһына, иммунитетҡа тергеҙгес, сәләмәтләндергес йоғонто яһай. Йәнә спирулиндар һәм С витамины менән бергә бал ҡушымтаһы сихәтле, биологик йәһәттән тәьҫирле. Уны көн һайын ҡулланғанда, интеллектуаль һәм физик әүҙемлек күтәрелә, шулай уҡ йөрәк-тамыр системаһының һәм ашҡаҙан-эсәк юлының эше яҡшыра.

Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге тәбиғи балға биологик актив өҫтәлмәләр, минераль һәм органик компоненттар өҫтәп, туҡланыу ризыҡтары ла әҙерләй. Анығыраҡ итеп әйткәндә, йод-казеин, неоселен, сәскә һеркәһе һәм С витамины, сәскә һеркәһе һәм "Тьянши" биологик актив өҫтәлмәһе, инә ҡорт һөтө һәм

”Тьянши” өҫтәлмәһе өҫтәлгән ”Дәрт” балы тәҡдим итә. Мәҫәлән, йодказеин ҡушылған бал кеше организмында матдәләр алмашыныуын яҡшырта, йод етешмәүен тулыландыра, нервы системаһын нығыта, ҡалҡан биҙе эшмәкәрлеген һәйбәтләй, үҫеүгә булышлыҡ итә.

Имселәр, табиптар бик тапҡыр билдәләгәнсә, бал — йәшәреү эликсиры, тән шифаһы, оҙон ғүмерлелек тәғәме. Халыҡ медицинаһында шешектәргә ҡаршы — әрекмән һуты ҡушылған, йүткереүҙән — тормаға һалынған, экземаны, һөйәлде, һытҡыны, бешкән урынды имләүҙә — ҡырылған картуфҡа өҫтәлгән, сәс үҫтереүгә һәм нығытыуға һуғанлы бал ҡулланалар. ”Табиплыҡ фәне ҡануны”нда балды таҙа көйө һәм дарыу үләндәре, еләк-емеш, йәшелсә, аш-һыу менән ҡулланыу буйынса бихисап кәңәш, тәҡдим бирелә.

Бал косметикала ла киң ҡулланыла, дауалау битлектәре яһағанда файҙаланыла. Уның нигеҙендә бит, тән, ҡулдар, аяҡтар өсөн туҡландырыусы кремдар, желелар эшләп сығарыла. Сәләмәтлек һәм матурлыҡ тәбиғәттең үҙенән тип белдереп, Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге косметик саралар҄ҙың ”Тылсымлы бал ҡорто” тигән яңы серияһын тәҡдим итә: төрлө-төрлө махсус кремдар, душ өсөн гель, шыйыҡ һабын, ванна өсөн күбек...

***

Күреүебеҙсә, белеүебеҙсә, хәҙер замандаштарыбыҙ йылдан-йыл күберәк тәбиғәткә, уның шифалы үҫемлектәренә, тәбиғи ниғмәттәренә һәм шулай уҡ бал ҡорто тәғәмдәренә иғтибарын көсәйтә, улар менән туҡлана, дауалана, сәләмәтләнә. Балды балалар ҙа, йәштәр ҙә, ололар ҙа хуш күрә. Ул медикамент һымаҡ, табиптар тарафынан да тәҡдим ителә. Терапевтик ҡиммәте составында прополис, һитә, инә ҡорт һөтө, организмға кәрәкле төрлө матдәләр булыуы менән аңлатыла.

Бал ҡорто донъяһы, умартасылыҡ, бал, прополис, инә ҡорт һөтө, һитә, ҡорт ағыуы менән дауаланыу тураһында китаптарҙан, матбуғат баҫмаларынан киң мәғлүмәт алырға була. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа Башҡортостан ҡортсолоҡ белгестәренең бик күп хеҙмәттәре китап булып баҫылып сыҡты: В.Н.Власов, ”Башҡорт бал ҡорто — тәбиғәттең ҡиммәтле хазинаһы”; Е.М.Петров, ”Башҡортостандың урман умартасылығы сығанаҡтары тураһында”; Д.Т.Шакиров, ”Умартасылыҡ”; Ә.М.Ишемғолов, ”Умартасылыҡты үҫтереү өсөн Башҡортостандың биологик ресурстары”; Н.И.Кривцов, А.П.Савин, Ә.М.Ишемғолов, ”Рәсәйҙең үҙәк регионының һәм Көньяҡ Уралдың бал биреүсе үҫемлектәре белешмәһе”... Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге белгестәре иһә ”Башҡорт бал ҡорто тоҡомон сығарыу методикаһы”, ”Бал ҡорто күстәрен комплекслы файҙаланыу”, ”Кортсолоҡ ниғмәттәре нигеҙендә туҡланыу аҙыҡтары һәм косметик саралар етештереү технологияһы” кеүек йыйынтыҡтар нәшер итте.

Владимир Солухин яҙғанса, бал — әхлаҡи категория, алтын, көмөш, алмас, гәрәбә, роза майы һымаҡ мәңгелек ҡиммәттәр менән бергә, бал да мәңгелек һәм ныҡлыҡ ҡиммәте эталоны. Ер йөҙөндә бал ҡорто ғәҙәттән тыш һирәк, үҙенә башҡа булған һымаҡ, бал да шулай.

# БАШКИРСКИЙ МЕД

В Коране, сказаниях многих народов медоносные пчелы представлены божественными созданиями. Башкирские исторические памятники (легенды, сказки, эпосы, дастаны, пословицы, поговорки, загадки) указывают, что древние башкиры с большой любовью занимались бортничеством. Исследователь П.И.Рычков писал: «…едва ли сыщется такой народ, который мог бы превзойти башкир в пчелиных промыслах». Бортничество — традиционное занятие башкир. Они в большом количестве имели борти и дуплянки с дикими пчелами. В своих знаменитых «Воспоминаниях» Ахметзаки Валиди Тоган пишет: «Наша пасека, состоявшая из сотни семей, находилась в четырех километрах от деревни… Кроме того, у нас были бортевые ульи, некоторые из которых для привлечения пчел помещались среди верхних ветвей больших сосен, а иные (солок) были вделаны в дупла вековых деревьев. Они находились за десятки и даже сотни километров в разных направлениях — в лесах и горах — от нашего аула. Эти бортевые ульи, доставшиеся нам в наследство от предков, следовало в апреле вычистить, обеспечить воском, чтобы в них поселились дикие пчелы…»

Башкортостан — единственный регион России, где до настоящего времени сохранились дикие пчелы, обладающие исключительной зимостойкостью, высокой биологической активностью и продуктивностью. Башкирская пчела от других пород отличается темно-серой окраской, более крупными размерами и устойчивостью к болезням пчел. Приспособлена к медосбору монофлорного типа (липа, гречиха). Бортевой мед перемешан с пергой, богат фруктозой и глюкозой.

Башкирский мед высоко ценится благодаря уникальной природе Башкортостана, его богатой и своеобразной растительности. По своим целебным и вкусовым качествам он не имеет аналогов в мире и считается символом Республики Башкортостан. Высокими качествами обладают цветочные меды: липовый, луговой с разнотравья, гречишный, донниковый.

В Республике Башкортостан принят Закон «О пчеловодстве», создано государственное учреждение «Башкирский научно-исследовательский центр по пчеловодству и апитерапии», которое имеет права пользования патентом «Башкирский мед». В структуре учреждения организованы шесть научно-экспериментальных станций для сохранения и приумножения башкирской популяции пчел. Башкирский научно-исследовательский центр поставляет башкирский мед в 28 регионов Российской Федерации и США.

Мед — удивительный дар природы, в создании которого участвуют цветы и пчелы. В продуктах пчеловодства есть все, что необходимо для здоровья и долголетия. По мнению древних целителей и философов, мед является основой «цветения тела и духа». Продукты пчеловодства содержат в своем составе аминокислоты, белки, углеводы, бальзамы, ферменты, микроэлементы и играют существенную роль в профилактике и лечении ряда заболеваний. Большинство микроэлементов, которые имеются в меде, прополисе, маточном молоке, перге, пчелином яде, обнаружены в крови и органах человека. Они принимают активное участие в обменных, ферментативных, витаминных процессах, способствуют излечиванию анемии, повышают иммунобиологические силы, ускоряют процесс лечения ряда заболеваний. Пчелиным медом лечат гипертоническую болезнь, неврастению, бессонницу, склероз, желудочно-кишечные заболевания, заболевания печени, ангину, грипп, воспаление миндалин, туберкулез, колит, радикулит, ревматизм… Мед рекомендуется всем — от грудных детей до престарелых.

# BASHKIR HONEY

In the Koran, popular legends of many peoples honeybees are represented as divine creations. Bashkir historical monuments (legends, fairy tales, epics, dastans, proverbs, sayings, riddles) specify that ancient Bashkirs were engaged in apiculture with loving care. A researcher P.I.Rychkov wrote: «... one can hardly find a better beekeeping people than the Bashkirs». Apiculture is a traditional craft of the Bashkirs. They had hollows with wild bees in large quantities. In his famous «Memoirs» Akhmetzaki Validi Togan writes: «Our apiary, composed of a hundred bee colonies, was at a distance of four kilometers from the village... Besides, we had beehives which were located among top branches of large pine-trees for attraction of bees, and some of them called solok were fixed in hollows of age-old trees. They were situated tens and even hundreds kilometers in different directions from our village — in woods and mountains. In April it was necessary to clean and supply with wax these beehives, passed down by our ancestors, so that wild bees could live there...».

Bashkortostan is a unique region of Russia where the wild bee still exists; this bee has an exclusive hardiness, high biological activity and efficiency. The Bashkir bee differs from other species by dark grey colouring, larger sizes and stability to diseases of bees. It is adapted to honey yield of monoflora character (linden, buckwheat). Honey is mixed with ambrosia, it is rich in fructose and glucose.

Bashkir honey is highly appreciated due to a unique nature of Bashkortostan, its rich and original vegetation. It has no analogues in the world by its healing power and flavouring qualities and is considered to be a symbol of the Republic of Bashkortostan. Flower honey, i.e. white, motley grass, buckwheat, and sweet clover honey, is of high quality.

In the Republic of Bashkortostan there was adopted a law «On beekeeping» and was created a state institution «Bashkir Research Centre on Beekeeping and Apitherapy», a holder of the patent «Bashkir honey». There have been also organized six scientific and experimental stations working on preservation and increase in number of the Bashkir bee. The Bashkir research centre delivers honey to 28 regions of the Russian Federation and the USA.

Honey is an amazing gift of nature, created by flowers and bees. Products of beekeeping have everything necessary for health and longevity. Ancient healers and philosophers believed that honey was a basis of «body and spirit blooming». Apiary products contain amino acids, proteins, carbohydrates, balms, ferments, microelements which play a vital part in prevention and cure of a number of diseases. The majority of microelements, honey, propolis, queen bee's milk, ambrosia, and apitoxin consisting of, have been found in blood and internals of man. They contribute to exchange, fermentative, and vitamin processes, promote cure of anemia, strengthen immunobiological vigour, increase the process of treatment for a number of illnesses. Bashkir honey is given the power to heal all types of illness: high blood-pressure, neurasthenia, insomnia, sclerosis, gastrointestinal, biliary diseases, quinsy, influenza, inflamed tonsil, tuberculosis, colitis, radiculitis, rheumatism... Honey is recommended to people of all ages.